*Кәҙим АРАЛБАЙ,*
*Салауат Юлаев исемендәге*
*дәүләт премияһы лауреаты*

# ”Ҡәләмдәшлек, ижадташлыҡ — яҙмыш...”

*Башҡорт әҙәбиәтен донъяға танытҡан, үҙенең шаҡтай оҙон ғүмерен ғәзиз Башҡортостанының татыу, берҙәм, матур һәм лайыҡлы йәшәүенә арнаған йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең баҙыҡ һыны, беҙҙең арабыҙҙан киткәс, бигерәк тә асыҡ төҫмөрләнә, уны юкһыныу һәм һағыныу хисе, йөрәктәрҙе һыҙландырып, арта ғына бара. Әҙәбиәтебеҙҙең бөйөк аҡһаҡалын беҙ әле йыш иҫкә алырбыҙ, тормоштоң төрлө хәлдәренә ҡарата уның аҡыллы кәңәштәренә торған һайын нығыраҡ мохтаж булырбыҙ...*

*Күп һанлы шәкерттәренең береһе булараҡ, остазыма үҙе иҫән саҡта, сөсөләнеү булыр тип, әйтелеп бөтөлмәгән йөрәк һүҙҙәрем күңелдә тулыша...*

*Халҡыбыҙҙың бөйөк улы Мостай Кәримдең яҡты иҫтәлегенә арналған ошо бағышлау шиғырҙарым уның тыуған һәм хәтерләү көнөнә бер шәлкем сәскәләр булһын ине.*

## Имән менән Шағир

Ул имәнде терәп торҙо бер аҙ.
Әллә имән уны терәтте.
Күҙ алдында беҙҙең шулай ҡалды
Мостай Кәрим.
Был хәл һирәктер.

Һуңғы булған икән был күрешеү,
Һуңғы — тәүтөйәге Шишмәһе.
Изге шишмә һыуын ауыҙ иттек.
Инеш буйына ул төшмәне.

Теләмәне изге булырғамы,
Әллә ҡалһын, тине, бүтәнгә.
Тағы килермен дә, тине, буғай,
Иҫе китмәй ғүмер үткәнгә.

Изгелекте күп ҡылһа ла үҙе,
Ышанманы ”изге” һүҙенә.
”Бөйөк изгелексе” — фәнниҙер ҙә,
Ҡылғандары — фани, үҙенсә.

Иллә үҙен бер ҙә һанаманы
Изге итеп — донъя буталсыҡ.
Изге булып ҡара был тормошта!
Ә бит унан күпме ут алдыҡ!..

Ул имәнде терәп торҙо шунда —
Мәңгелектең илаһи бер мәле:
Серҙәш,
ерҙәш
Имән менән Шағир
Тарихтарға шулай инмәле!

Йәшәмәне титан тиран кеүек,
Ил иңрәтеп, донъя тетрәтеп.
Хис батшаһы,
Уй хакимы булды.
Торҙо бер аҙ имән терәтеп...

*2006.*

# Шаяртыу



”Хеҙмәтсәндәр һорағанға ғына
Йәшәп ятам!” — тиеп шаярттың.
Бөтә ил һораны йәшәүеңде,
Тыңламаның, Шағир, шымарттың.

Титандар ҙа бер мәл китә, имеш.
Уйламаныҡ улай булырын.
Көтмәнек тә,
Арабыҙҙан Һинең
Һуңғы сәғәттәрең һуғырын.

Баҡһаң...
Имән кеүек ир ҙә көсһөҙ икән
Әжәл тигән йәлләт алдында.
Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр... йырҙа.
Их, ысынлап дарыу табылһа!..

Эҙләгәндәр.
Тапмағандар...
Әммә
Йыртмағандар әжәл йәтмәһен.
”Көнө бөтһә...” тигән аҡланыуҙы
Әйттең ни ҙә хәҙер, әйтмәнең.

Белделәр бит:
Имән һынлы Ир ҙә
Бәйгеләрҙә бер мәл ауаһын.
Мостайға ни, әҙер тора, тинек,
Әжәлдәрҙән йолор дауаһы.

Бөтә ил һораны йәшәүеңде,
Тыңламаның, ҡартлас, шымарттың:
”Хеҙмәтсәндәр һорағанға ғына
Йәшәп ятам...” — тиеп шаярттың.

Һинең һәр һүҙеңә ышанғандай,
Шаяртыуыңа ла ышандыҡ.
Һине юҡһыныуҙан йән өшәнде.
Телһеҙ ҡалдыҡ.
Һуштан бушандыҡ...

*2006.*

## Бер урамда, бер үк иманда

Һин йәшәгән йортҡа сәләм бирәм,
Көн дә ҡайтам һинең урамға.
Ҡәләмдәшлек,
Ижадташлыҡ — яҙмыш,
Тормош юлдары ла уралған.

Ҡәләмдәш тә булдың,
Һин — атай ҙа
Шиғри, сихри ошо урамда.
Бер миңәме?! — Күптәр остаз итте
Һине танып моңсол Уралдан.

Фекер ҡайнап,
Теләк ярһығанда
Үҙаллылыҡ өсөн көрәштә,
Һиңә ҡарап ҡалған саҡтар булды
Маңлайҙарға маңлай терәштә.

Гел ижадта түгел,
Заруратта
Терәк булдыҡ микән? — Оялам...
Һинең алда еңел түгел ине
Әҙәбиәт тигән донъяла.
Моңдаш инек,
Ҡай саҡ юлдаш булдыҡ
Сәфәрҙәрҙә, хисле һуҡмаҡта.
Өйрәттең дә:
Үҙ-үҙеңә тоғро ҡалғанда ла
Сит фекерен өҙә һуҡмаҫҡа...

Һин йәшәгән урам,
Ҡалған йортоң
Дуҫтарыңды, шөкөр, юғалтмай.
Һин йөрөгән юлдар һүҙ ҡуйышҡан:
Эҙҙәреңде һаҡлай, һыуытмай.

Ул урамда бөгөн кем генә юҡ,
Аҙашып та кемдер ингеләй.
Бөгөн үҙең алыҫ,
Ә исемең
Кемгә генә яҡын күренмәй?..

Етемһерәп ҡалған урамыңдан
Үтәм толҡа тапмай, шәмәреп.
Һинең тауыш ишетелер, тиеп,
Ишетмәйем бер кем хәбәрен.

Һинең урам миңә —
Моңло йыр ҙа,
Һағынып ҡайтып инер төйәк тә,
Йөрәгемде йылытыр бер ут та,
Өмөт-хыялыма терәк тә.

Һинең урам —
Һин йырлаған ер ул,
Һин данлаған
Һәм һин табынған,
Яуҙа ҡойоп ҡаның,
Һин һаҡлаған,
Донъяларға йырлап таныҡҡан.

Ошо ерҙә тыуған йырҙарыңды,
Аманаттай,
Васыят итеп беҙгә ҡалдырҙың:
”Илдә иң мөҡәддәс —
татыулыҡтыр,
Оҙаҡ янмаҫ уты яңғыҙҙың...”

Йәшәнек был яҡты донъяларҙа
Бер урамда, бер үк иманда.
Ҡалырбыҙ ҙа
Шул урамда
Шул иманға тоғро —
Йәшәгәндә башҡорт Уралда.

*2006.*

